# Төбәктәр ҡоролтайҙан ниҙәр көтә?

*«Ватандаш» журналистары кинәйтелгән ултырышта ҡатнашҡан региональ ойошмалар вәкилдәренән блиц-интервью ҙа алып өлгөрҙө. Төбәктәрҙәге ҡоролтайҙар етәкселәренә барыһына ла бер генә һорау бирелде: улар Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына нисек әҙерләнә, унан нимә көтә?*

**Ҡазан ҡалаһы башҡорттарының милли-мәҙәни йәмғиәте рәйесе Фирҙәүес Тимербулат ҡыҙы БӘШИРОВА:**

— Беҙҙең милли-мәҙәни йәмғиәт ағзалары нигеҙҙә зыялылар. Улар араһында арҙаҡлы шәхестәр байтаҡ. Танылған балерина Нинель Дауыт ҡыҙы Юлтыева, Ғ.Камал исемендәге академия драма театрының баш хореографы Сәлимә Әмин ҡыҙы Абызгилдина, йырсы Зилә Сөнәғәтуллина һ.б. Әйткәндәй, Зилә Сөнәғәтуллина менән осрашыу бик матур үтте. Башҡортостандың Салауат районында тыуып үҫкән танылған йырсы Ҡазан консерваторияһында уҡыта, профессор. Беҙҙең йәмғиәттең «Осрашыуҙар тирмәһе» бар, шунда үткән кисәләргә Башҡортостанда тыуып үҫкән байтаҡ кеше йөрөй. Тел мәсьәләһенә ҙур иғтибар бирәбеҙ. Ял көнө класы ла эшләй һәм унда 7 ҡыҙ башҡорт телен өйрәнә. Уларҙы Белорет районы ҡыҙы Миләүшә Камалова уҡыта. Ә Гүзәл Йәрмөхәмәтова бейеүгә өйрәтә. «Башҡорт ҡурайы» тигән кисәбеҙҙә ошо милли музыка ҡоралын тыңлап ҡыуандыҡ, күптәрҙең күңелендә ҡурайға ихтирам уянды унда.

Осрашыуҙарҙа башҡа өлкәләрҙән килгән башҡорттар ҙа әүҙем ҡатнаша. Мәҫәлән, Кәрим Тинчурин исемендәге театрҙың директоры Әлимәмбәтов — Ырымбур өлкәһенән. Башҡортса яҡшы һөйләшә.

Әле бына башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаевтың юбилейына әҙерлек алып барабыҙ. Спонсорҙар тапһам, балаларҙы Эстонияға, Палдискиға алып барырға ниәт бар. Батырҙың тыуған төйәге Салауат районын барып күрергә ашҡынабыҙ.

Уҙған йыл Булғарға барып, «Волга буйы булғарҙары һәм башҡорттар» тигән темаға фәнни-ғәмәли конференция үткәреп ҡайттыҡ.

Беҙ Башҡортостанда әүҙем үткән «Ғаилә йылы», «Әсә йылы» кеүек сараларҙы ҡыҙыҡһынып күҙәтәбеҙ, уның һөҙөмтәләре өсөн ҡыуанабыҙ. Ошондай сараларҙы ҡоролтай кимәленә күтәрергә ине. Әйтәйек, алдағы йылдарҙың береһен «Аҡмулла йылы», «Ҡол Ғәли йылы» тип үткәргәндә отолмаҫ инек, моғайын.

II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын унда милләтебеҙҙе борсоған мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшербеҙ, айырыуса милли кадрҙар әҙерләү, башҡорт халҡының һан яғынан кәмеүенә юл ҡуймау, мәҙәни үҫеш проблемаларын хәл итербеҙ тигән өмөт менән көтәбеҙ.

*(Редакциянан белешмә өсөн: 20 меңдән ашыу башҡорт йәшәгән Татарстанда, юғарыла әйтелеүенсә, берҙән-бер ял көнө класында ни бары 7 башҡорт балаһы үҙ телен өйрәнә. Сағыштырыу өсөн: Башҡортостанда иһә бер Өфө ҡалаһында ғына*

*10 меңдән ашыу бала 85 мәктәптә татар телен өйрәнә).*

**Генеральный директор АО "Алина-Александровское", председатель Исполкома Курултая башкир Александровского района Оренбургской области Миннулла Рысмухаметович ГАБИТОВ:**

— Я работаю в исполкоме с того времени, когда у нас в области было создано культурно-просветительское общество "Караван-Сарай". Был делегатом I Всемирного курултая башкир в Уфе в 1995 году.

Мы многого добились в своей работе за последние годы. В башкирских деревнях района дети стали изучать родной язык, при филологических факультетах Оренбургского пединститута и педколледжа открыты башкирские отделения. Например, в селе Исянгильды, где родился известный башкирский писатель Сагит Агиш, была только начальная школа. Мы добились, чтобы в селе открыли среднюю школу и теперь гордимся, что почти все ее выпускники поступают в вузы. Учительница башкирского языка этой школы стала победительницей конкурса "Учитель года" и в качестве поощрения побывала в Париже.

Необходимо, чтобы как можно больше башкирских детей получили хорошее образование, стали высококвалифицированными специалистами, руководителями хозяйств, предприятий, политиками, депутатами, реально влияющими на ход событий в стране.

**Председатель Исполкома Курултая башкир Самарской области Сынтимир ГАРИФОВ:**

— Мы долго ждали проведения Всемирного курултая башкир, так как остро нуждаемся в общении с Башкортостаном, его населением. Курултай нам дает возможность общения со своими соплеменниками, возможность критически осмыслить наше сегодняшнее состояние, искать оптимальные пути решения своих насущных проблем. В итоге мы думаем и о своем будущем, и о будущем наших потомков. Это общение дает нам возможность почувствовать дух коллективизма, единства народа и пробуждает стремление каждого из нас к самореализации на общее благо. Наши совместные идеи и наблюдения обязательно должны преобразить нашу жизнь.

Проведение Всемирного курултая башкир необходимо для повышения статуса Республики Башкортостан в Российской Федерации, ее роли в духовном воспитании и просвещении подрастающего поколения, объединении нашего народа.

**Омск өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Клара Ғәли ҡыҙы КУКАРКИНА:**

— Туған теленән, тамырынан ситләшеү кешене милли үҙаңынан, кешелек ғорурлығынан, милли әхлаҡ сығанаҡтарынан, аҙаҡ килеп ата-әсәһенән айыра. Мәҙәниәт, тел, аралашыу аша ана шул төп бурысыбыҙҙы күҙ уңынан ебәрмәҫкә ине. Әлегә беҙҙә эшләүе ауыр. Телде онотҡанбыҙ. Бына Башҡортостандың бер атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәрен эшкә саҡырып, «ҡоҙалап» йөрөйбөҙ. Шул мәсьәлә хәл ителһә, бергәләп эшләргә дәртем бар. Халыҡтың көнкүрешен, уның рухи донъяһын, матур сифаттарын асып, шуларҙы саф башҡорт телендә халыҡҡа еткереүсе шәхес етешмәй Башҡортостандан ситтә йәшәүселәргә. Берәр ярты йылға эшләргә килеүсе «декабристар» табылыуын теләр инем...

**Председатель Исполкома Курултая башкир Москвы и Московской области Батырхан Амирханович МУРЗАБАЕВ:**

— Когда в Москве проводились Дни Республики Башкортостан, наш Исполком Курултая организовал встречу Президента РБ М.Рахимова со студентами из Башкортос-

тана. Тогда студенты попросили выделить для Исполкома кабинет в постпредстве и штатную единицу для работы с башкирской диаспорой, в особенности с учащейся в Москве молодежью. Кабинет обещали выделить, сами студенты выбрали из своей среды человека для работы в постпредстве. Но идея провалилась. Свободный доступ в постпредство для студентов не получился, так как постпредство — это режимный объект и доступ туда ограничен. И на сегодняшний день эта работа сведена до минимума. Отдельные наши просьбы по оказанию какой-либо помощи исполняются, но постоянного сотрудничества Курултая башкир с Башкирским постпредством нет.

Почему же на местах работа исполкомов курултая плохо организована? Потому что все строится исключительно на общественных началах. Общественной работой кто в основном занимается? Люди творческие, ученые, интеллигенция — то есть представители малооплачиваемых слоев населения, вынужденные просить спонсорскую помощь. Чтобы с кого-то требовать выполнения работы, надо его прежде обеспечить всем необходимым: выделить помещение, оборудовать его современной оргтехникой. Я, например, всю оргтехнику — факс, компьютер, ксерокс, купил на свои деньги. Надо же как-то работать. Надо создать внебюджетный фонд и из средств фонда оплачивать работу минимум двух штатных единиц в регионах — председателя Исполкома Курултая и секретаря. Причем, здесь надо применять индивидуальный подход. Нужно считаться с тем, что в Москве это дорогое удовольствие. Например, самый маленький однокомнатный офис обойдется не менее 300-500 долларов в месяц. Потом, не будешь же представлять республику в офисе, расположенном где-нибудь на окраине, за пределами кольцевой автодороги. Ходить вечно с протянутой рукой унизительно. Мне приходилось слышать от чиновников: “Мы не можем работать только на башкирскую диаспору, Москва — многонациональный город”. И они правы. Поэтому надо искать какие-то другие пути выхода из сложившейся ситуации.

Курултай башкир Москвы и Московской области был создан в прошлом году на базе существующего с 90-х годов московского общества “Башкортостан”. В эти годы в Москве начала функционировать воскресная школа для башкирских детей, где они изучали язык, культуру своего народа. Но в последнее время возникли серьезные трудности. Если раньше родители вместе с детьми могли свободно посещать школу, где они общались в неформальной обстановке, устраивали совместные чаепития и так далее, то сейчас все это прекратилось. Руководство школы запретило родителям доступ и они должны ждать своих детей на улице. Занятия в такой школе должны проводиться в игровой форме — дети и так устают от уроков за учебную неделю, а тут в выходной день опять за парту, как на обычный урок. Игры проводить негде — кабинеты маленькие. И с каждым годом все меньше детей стали водить в воскресную башкирскую школу. И мы решили, что пока не будет возможности содержать хорошее помещение для школы, лучше этим не заниматься. Такая же история получилась и с детским садом. Для наших детей выделили одно крыло обычного детского сада, где протекала крыша, предложив нам самим отремонтировать помещение. Родители, естественно, возмутились. Если уж возить ребенка в детский сад через всю Москву, то нужно, чтобы это был необычный садик, хотя бы на полголовы выше, чем другие детские дошкольные учреждения, чтобы детей здесь обучали не только языку, но и танцам, песням, народным играм — всему тому, что могут дать только специалисты по национальной культуре, чему невозможно научиться дома.

Ребенок в таком учреждении должен впитать в себя гордость за свою нацию. Конечно, если в семье никто не разговаривает на родном языке, никакая воскресная школа не поможет. Значит, ответственность с родителей не снимается. Но если детский сад не отвечает требованиям, поставленным родителями, желающими воспитать ребенка патриотом своей нации, тогда его лучше вообще не открывать. Мои дети с гордостью пели башкирские песни и все воспитанники детского сада, среди которых не было ни одного башкира, с удовольствием им подпевали, выучив слова, хотя и не понимали смысла — просто дети поняли дух песен.

Основная задача нашего Исполкома — в лучшем виде, достойно представить перед другими московскими диаспорами башкирскую нацию. С этой целью мы организовали в Москве гастроли лучших коллективов Башкортостана. Но, бывает, даже сами московские башкиры на концерты не ходят.

В прошлом году накануне Дня Победы силами башкирских артистов, обучающихся в Москве или переехавших сюда жить, поставили спектакль. Арендовали театр “Эрмитаж”, через правительство Москвы пробили оплату за аренду и зарплату артистам. Благо, в Москве обучается большое количество нашей творческой молодежи. Расклеили по всему городу афиши, послали пригласительные, в том числе и в постпредство. Спектакль был назначен на выходной день, вход свободный, но зрителей было мало. Только небольшая часть приглашенных пришла, даже из постпредства никого не было. Спектакль прошел на хорошем уровне — те, кто пришел, не пожалели об этом. Дело здесь в другом — общей пассивности нашего народа.

Москва — индикатор всей национальной политики в стране. А в регионах национальную политику проводят с оглядкой на Москву. Нельзя не отметить и то, что диаспоры в столице стали смелее, решительнее. Если раньше все просили, клянчили, то сейчас требуют, отстаивают свои права как налогоплательщики. Мы — граждане Российской Федерации, выполняем перед государством свои обязательства как граждане этой страны, и государство должно уважать наши права. Наш Исполком активно участвует в работе диаспор Москвы и Московской области. На стадии регистрации сейчас находится Башкирское землячество, куда войдут представители всех национальностей — наши соотечественники.

**Силәбе ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Алһыу Рамазан ҡыҙы СИРҒӘЛИНА:**

— Силәбе ҡалаһында 35 мең башҡорт йәшәй, ҡоролтай әүҙем эшләй. Ҡуйылған маҡсаттар барыһы ла тормошҡа ашмаһа ла, ике йыйын арауығында байтаҡ эштәр башҡарылды. Ҡала башҡорттары йәнле мәҙәни тормош менән йәшәй. Әле яңыраҡ Рамазан Шағәлиевтың «Исемһеҙ йондоҙҙар» тигән шиғри йыйынтығының презентацияһын үткәрҙек, йырсы Гөлнур Искәндәрованың ижади кисәһе булды. Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмә уңышлы ғына эшләп килә. Ойошмала ете яҙыусы үҫеп сыҡҡан. Өмөтлө йәштәребеҙ ҙә бар. Мәҫәлән, Башҡортостан баҫмаларында йәш шағирә Зилә Ғәлләмова әҫәрҙәре күренгеләй башланы.

Беҙҙең иң ҙур ғорурлыҡ — Шәйехзада Бабич исемендәге китапхана. Үҙем дә шунда эшләйем. Унда «Уралым» милли-мәҙәни клубы ойошторолдо. Китапхана — беҙҙең төп аралашыу урыны. Башҡортостан яҙыусылары беҙҙә йыш була. Рәшит Шәкүр, Рауил Бикбаев, Кәтибә Кинйәбулатова, Сафуан Әлибаев, Аҫылғужа Баһуманов, Әнисә Таһировалар үҙ кешеләребеҙ һымаҡ хәҙер. Китапхана мөдире Әлфирә Усманова, хеҙмәткәрҙәр Рәүиә Ғималова, Көнһылыу Әйүпова, Хөснә Хәмзина, Әлфиә Ҡадирова, Татьяна

Имамова, Әминә Чанышева, Урал Ҡолошов ҡоролтайға һәр саҡ ярҙам күрһәтергә әҙер. Башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе Рәлиф Кәримов, «Фатиха» башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте рәйесе Фатима Капжасарова менән бергәләп күп мәсьәләләрҙе хәл итәбеҙ. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөтә эш әлегә бер төркөм энтузиастар иңендә генә ята. Беҙгә рәсми органдар кимәлендә эшләүе бик ауыр. Эште дәүләт кимәленә ҡуйырға ваҡыт. Әлегә беҙҙең, исмаһам, бер бүлмәбеҙ ҙә юҡ. Факс кәрәк булһа ла төрлө урынға инәлеп барабыҙ, ҡағыҙына ла, конвертына ла аҡса кәрәк. Силәбелә Башҡортостан Республикаһының вәкиллеге булдырылһа ла, ул әлегә беҙҙең эштән ситләшә. Күрәһең, ундай вәкиллектәрҙең эшмәкәрлеген үҙгәртеп ҡорорға кәрәк. Улар иң тәүҙә урындағы башҡорттарҙың проблемалары менән шөғөлләнһен ине. Беҙгә офис, рәйес һәм секретарь өсөн штат бирәмеге, оргтехника кәрәк — артабан шунһыҙ эш бармаясаҡ. Энтузиазмдың да ахыр сиге бар бит. Бына шуға күрә Өфөлә ҡоролтайҙар йышыраҡ, бәлки йыл һайын үткәрелеп, мәсьәләләр оператив хәл ителһен ине. Әлегә иһә эш һүлпән ҡоролған. Ҡоролтай резолюцияһына ошо офис, штат бирәмектәре, техника менән тәьмин итеү буйынса пункт инергә тейеш — эште ойоштороуҙан башларға кәрәк. Югиһә, мәктәптә, балалар баҡсаһында йә китапханала эштән һуң йыйылып ҡына нимәгә өлгәшәһең? Ә энтузиастар булмаһа, эш бөтөнләй туҡталып ҡалыр ине.

Силәбелә 4 меңгә яҡын мәктәп йәшендәге башҡорт балалары бар, ә бер башҡорт мәктәбе лә, класы ла юҡ. Был эште Башҡортостан менән берлектә, хөкүмәт-ара килешеү нигеҙендә генә ойоштороорға мөмкин. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте белгестәрен Силәбе университеты әҙерләй башланы, Башҡортостан вуздары ошо эштә бик ҙур ярҙам күрһәтә. Республика халыҡ мәғарифы министры Ғәлиә Мөхәмәтйәнова күп эш башҡарҙы.

Ҡалала быға тиклем башҡорт теле төрөк-башҡорт лицейында уҡытылды. Үҙем дә шунда эшләнем. Әммә төрөктәр аҙаҡ уны төрөк-рус лицейы итеп үҙгәртте. Төрөктәр килеп эшләгәнде беҙҙең Башҡортостан эшләй алалыр бит. Ҡыҫҡаһы, Силәбелә ҙур, заманса йыһазландырылған башҡорт лицейы кәрәк.

Ата-әсәләр менән һөйләшеп, балалар баҡсаһы асыу мөмкинлеген дә тикшерәбеҙ. Әлегә 464-се һанлы баҡсала башҡорт төркөмө эшләй. Был йүнәлештә Луиза Нафиғина әүҙемлек күрһәтә.

Силәбелә элек башҡорт драма театры, филармония эшләгән. Шуларҙы тергеҙеү талап ителә. Ижади көстәребеҙ ҙә бер аҙ бар. Солистар Нәзибә Хәбибуллина, Ғафуан Фазуллин Башҡортостан тамашасыларына ла билдәле. Республикала «Айгөл» халыҡ ансамблен дә яҡшы беләләр. Әле уның художество етәксеһе юҡ. Башҡортостандан белгес саҡырһаң, йәнә фатиры, штат бирәмеге һәм аҡсаһы кәрәк — хәҙер бирәү ҙә, бюрократтарса әйткәндә, «на общественных началах» эшләмәй.

Башҡортостандағы матбуғат баҫмаларының барыһы ла Рәсәй каталогына индерелһә, беҙгә уңайлыраҡ булыр ине. Әлбиттә, урындағы башҡорттар үҙҙәре лә башҡорт гәзит-журналдарын күберәк алдырып уҡыһын ине — был йүнәлештә эшләйһе бар әле. Силәбе өлкәһендә башҡорттар күп, ошо йәһәттән дә резерв ҙур.

Бөгөнгө шарттарҙа телевидениеның мөмкинлектәре менән иҫәпләшмәү мөмкин түгел. Магнитогорск ҡалаһында башҡорт телестудияһы күп йылдар эшләп килә, тик уларға эфир ваҡыты аҙ бирелә. Өфөлә спутник телевидениеһы каналы асылыуы ҙур ҡаҙаныш, әммә был йүнәлештә эште дауам итергә кәрәк. Өлкәлә башҡорттарҙың күп булыуын иҫәпкә алып, эш тә ҙурыраҡ масштабтарҙа барырға тейеш.

**«Каруанһарай» Ырымбур башҡорттары ҡоролтайы ижтимағи хәрәкәте рәйесе Ришат Ғәлиәкбәр улы ТИМЕРОВ:**

— Беҙҙең ҡоролтай 1989 йылдан бирле эшләп килә. Ҡоролтай мәҙәниәт, мәғариф, матбуғат проблемаларына ҙур иғтибар бирә. Уларҙы өлкә хакимиәтенең милли мөнәсәбәттәр комитеты менән берлектә хәл итергә тырышабыҙ. Әле Ырымбур өлкәһенең 43 мәктәбендә башҡорт теле уҡытыла. Туған тел өйрәнелгән мәктәптәрҙе арттырыу йәһәтенән ҡаршылыҡтар ҙур. Өлкә хакимиәтендә башҡорт телен уҡытыу өсөн ата-әсәләрҙән рөхсәт алыуҙы талап итәләр. «Программа былай ҙа көсөргәнешле, башҡорт теле нимәгә кәрәк», — тигән һүҙҙәр ҙә ысҡындыралар. Шундай шарттарҙа эш итергә, үҙ мәнфәғәттәребеҙҙе яҡларға тура килә.

Башҡортостан иһә дәреслектәр, уҡыу ҡулланмалары, нәфис әҙәбиәт менән ярҙам итә, уларҙы мәктәп, район китапханаларына таратабыҙ. Балаларыбыҙ Рәми Ғарипов исемендәге башҡорт республика гимназияһында, башҡорт-төрөк лицейында белем ала. Йыл һайын ун уҡыусыға Башҡортостан юғары уҡыу йорттарына юлланма бирәбеҙ.

Милли матбуғатҡа килгәндә, милләт-ара радио башҡорт һәм татар телдәрендә аҙнаға ике тапҡыр бер сәғәтлек, телевидение аҙнаға бер «Милләт-ара аралашыу» тигән тапшырыуҙар алып бара. Башҡортса «Каруанһарай» исемле гәзит сығара инек, әле сыҡмай, сөнки эш бүлмәһен алдылар. Әлбиттә, башҡортса тапшырыуҙар, гәзит ҡәрҙәштәребеҙ өсөн бик танһыҡ.

Башҡорт мәҙәниәте фестивалдәре ойоштороабыҙ, 2000 йылда ул Ҡыуандыҡта үтте, ҡәрҙәштәребеҙҙең кәйефен, рухын күтәрҙе. 2001 йылда халыҡтар дуҫлығы фестиваленда лә әүҙем ҡатнаштыҡ. Красногвардейский районында үткәрелгән һабантуй ҙа милләттәштәребеҙҙең күңеленә хуш килде.

Әлбиттә, тағы ла ырымлыраҡ, йөгөнтөлөраҡ эшләү кәрәклеген аңлайбыҙ. Ҡыйынлыҡтар ҙа ҡамасаулай. Офисыбыҙ юҡ, фатирҙа йыйылабыҙ. Халҡыбыҙҙың изге йортон — Каруанһарайҙы ҡайтарыу байтаҡ милли ихтыяждарҙы ҡәнәғәтләндерергә булышлыҡ итер ине. Башҡортостан Республикаһы менән Ырымбур өлкәһе араһында 1996 йылдың 20 сентябрендә төҙөлгән «Дуҫлыҡ, яҡшы күршеләрсә мөнәсәбәт һәм хеҙмәттәшлек тураһында» килешеүҙең 5 статьяһында шулай тиелгәйне: «Туған телдәрҙе һәм милли мәҙәниәттәрҙе һаҡлау һәм үҫтереүҙе гарантиялап, бер-береңдең тарихына, йолаларына, ҡиммәттәренә һәм ихтыяждарына ихтирам нигеҙендә, үҙҙәре йәшәгән урындарҙа халыҡтарҙың мәҙәни-мәғлүмәт бәйләнештәренә һәм үҙ-ара рухи байыҡтырышыуға һәр ике яҡ булышлыҡ күрһәтәсәк. Ырымбурҙағы «Каруанһарай» тарихи-мәҙәни комплексын тергеҙеү һәм файҙаланыу буйынса яҡтар хеҙмәттәшлек тураһында махсус килешеү төҙөйәсәк».

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ике яҡлы килешеүҙә ҡаралһа ла, Карауанһарай мәсьәләһе әлегәсә хәл ителмәгән. Ә бит Каруанһарай Ырымбур башҡорттарына ғына түгел, тарихи ҡомартҡы булараҡ, бөтә Башҡорт иленә кәрәк. Башҡортостан менән Ырымбур өлкәһе араһындағы килешеүҙе яңыртып, Каруанһарайҙы халҡыбыҙға ҡайтарыу мотлаҡ.

**Ырымбур өлкәһе Орск ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы ижтимағи хәрәкәте рәйесе Мадрид Ишбулды улы ҮТӘМӘШЕВ:**

— Орскиҙа 15 мең башҡорт йәшәй. Ҡәрҙәштәребеҙҙе барлап, ҡуҙғалыуыбыҙға, милли мәсьәләләрҙе хәл итергә ынтылыуыбыҙға, төрлө саралар үткәрә башлауыбыҙға биш йыл. Ҡаҙаҡтар, татарҙар менән бергә Науруз байрамы ойошторҙоҡ. Унда Башҡортостанда йәшәгән ҡәрҙәштәребеҙ ҙә ҡатнашты. Хәйбулла районынан — Аҡъярҙан килделәр, тирмә ҡорҙолар, башҡорт халыҡ аштарын, кейемдәрен күр-

һәттеләр, концерт ҡуйҙылар. Ошолай үҙ-ара аралашыу бик тә кәрәк, халҡыбыҙ бар, йәшәй, мәҙәниәте, сәнғәте күркәм тигән хис-тойғо уяна. Айырыуса Зиннур Йәрмөхәмәтов хакимиәт башлығы сағында Сибайҙа булып, рухланып, ҡөҙрәт алып ҡайттыҡ.

Ырымбур өлкәһендәге башҡорт ауылдары, ошо ерҙә йәшәгән башҡорттар тураһында мәғлүмәттәр йыйҙыҡ. Гай, Новотроицк ҡалаларында йәшәгән ҡәрҙәштәребеҙ менән бергә Орскиҙа ҡала башҡорттары көнө, йәнә арҙаҡлы шәхестәребеҙҙе танып белеү өсөн конференция үткәрҙек. Аҙнаһына бер мәртәбә радионан башҡорт телендә яңылыҡтар тапшырыла. Орскиҙағы тыуған яҡты өйрәнеү музейында башҡорттарҙың көнкүреше күрһәтелгән бүлек бар.

Иң мөһим бурыстарҙың береһе — балаларыбыҙҙы милли рухлы итеп үҫтереү. Ләкин әлегә Орскиҙа улар туған телен өйрәнмәй, уҡытыу юҡ. Башҡортса белмәгәс, тамыр ҡорой. Балалар ижады түңәрәген ойошторорға ниәтләйбеҙ. Маҡсаттарға өлгәшер, көрәшер өсөн интеллигенция аҙ. Шулай ҙа милли проблемаларҙы хәл итеү буйынса 2001—2005 йылдарға программа төҙөп, ҡала хакимиәтенә бирҙек. Милләтебеҙҙе тергеҙеү һәм үҫтереү маҡсатын хәл итеү өсөн Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты урындағы ҡоролтайҙар менән тағы ла әүҙемерәк, йәнлерәк эшләүен теләйем.

**Һарытау өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Зөфәр Шәмсеғәли улы ХӘКИМОВ:**

— Һарытау өлкәһе башҡорттары әүҙем ижтимағи-сәйәси мөхиттә йәшәй. Эшебеҙҙә Һарытау өлкәһе һәм ҡалаһы хакимиәте етәкселәренең ихлас ярҙамына таянабыҙ. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, айырыуса Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы менән ныҡлы бәйләнеш тотабыҙ. Һарытау өлкәһендә Башҡорт мәҙәниәте көндәре бик уңышлы үтте. Уның сиктәрендә Һарытау ҡалаһында «Башҡорт һәм татар халыҡтарының мәҙәни сығанаҡтары» тигән фәнни-теоретик конференция ойошторолдо. Өлкәнең Перелюбский районында Һарытау өлкәһе башҡорттары ҡоролтайының бүлексәһен асыу ҙа оло бер ваҡиға булды.

Һарытау өлкәһе хөкүмәтендә башҡорт зыялылары менән осрашыу ваҡытында төбәктә йәшәгән халыҡтың милли һәм мәҙәни үҫешенә булышлыҡ итәсәк байтаҡ документтарға ҡул ҡуйылды.

«Иҙел йондоҙҙары» тип аталған балалар фестивален ойоштороуҙа ла әүҙем ҡатнаштыҡ, сөнки балалар күңеленә ҡунған милли осҡондар киләсәктә йондоҙ булып балҡыясағына шик юҡ.

Мәҙәни өлкәлә Башҡортостан менән бәйләнештәр айырыуса һөҙөмтәле. Мәҫәлән, Нефтекама ҡалаһының «Ағиҙел» вокаль-инструменталь ансамбле Перелюбский районының Пугачевск ҡалаһында, Усть-Тюза ҡасабаһында сығыш яһап ҡыуандырҙы. Быйыл Һарытауҙа тағы Башҡортостан мәҙәниәте көндәре үткәрелеп, ул ҙур концерт менән тамамланасаҡ. Концертта бар донъяға танылған Ф.Ғәскәров исемендәге дәүләт бейеү ансамбленең дә ҡатнашыуы көтөлә. Ҡыҫҡаһы, Һарытау башҡорттары II Ҡоролтайҙы әҙерлек һәм ҙур өмөттәр менән ҡаршылай.

**Председатель Исполкома Курултая башкир города Оренбурга Сахия Галияновна ЯКШИГУЛОВА:**

— Мы приехали на это заседание с большой надеждой, что принятые на нем решения помогут активизировать нашу работу. Надо признаться, мы несколько снизили темпы своей деятельности. Не могу сказать, что Исполком курултая не работает, но хотелось бы работать результативнее. Я четвертый год возглавляю городской курултай баш-

кир, с 1989 года — в Башкирском обществе. Всего в нашем обществе около 250 человек, активно принимающих участие в проводимых Исполкомом мероприятиях. Нас часто приглашают на общегородские мероприятия. В последний раз участвовали в областном фестивале культур народов, населяющих Оренбург, представили на нем свою национальную кухню. Ежегодно весной в городе проводится областной этнографический детский фестиваль, в котором принимают участие и школьники из башкирских районов. Мы их здесь встречаем, готовим для них специальные призы от нашего общества. К сожалению, в городе нет башкирских классов, дети башкир не имеют возможности обучаться родному языку. Я сама родом из Кувандыкского района, деревни Верхненазаргулово. В этой деревне вот уже второй год школьники не изучают башкирский язык, хотя есть специалист по языку — выпускница Башкирского государственного университета. В РОНО объясняют это тем, что, мол, родители не хотят, чтобы их дети изучали башкирский язык. Но причины тут другие. Я тоже обучалась в русской школе, но в семье мы говорим на родном языке. И дочь, и сын — они студенты — знают башкирский язык. Очень редко нам представляется возможность слышать родную речь по радио — иногда бывают концерты по заявкам радиослушателей, передают башкирские и татарские песни. На телевидении таких передач нет. Вот уже год не издается газета на башкирском языке. Причина — нет редактора.

Еще бы я хотела обратить внимание на такой вопрос. По договору между Башкортостаном и Оренбургской областью выпускники наших школ направляются на учебу в высшие учебные заведения республики. Но не всегда эта договоренность срабатывает, много препонов возникает при поступлении наших ребят в вузы Башкортостана. Хотелось бы, чтобы выпускники башкирских школ Оренбуржья, направленные по программе целевой подготовки студентов, автоматически зачислялись в институты и университеты Башкортостана. Нам в Оренбурге нужны специалисты не только в области народного образования, но и в других сферах: в промышленности, торговле, здравоохранении. Надо бы расширить программу целевой подготовки студентов, не ограничиваясь только подготовкой учителей башкирского языка.

Пока у нас вся работа основана на общественных началах, все держится исключительно только на энтузиазме. В наше время тяжело работать на общественных началах, все труднее находить спонсорскую помощь. Предлагаю организовать штатную единицу председателя Исполкома.

Еще один наболевший вопрос — Караван-Сарай. Мы давно просим о передаче всего комплекса зданий этого уникального учреждения Башкирскому обществу. Пока наш Исполком занимает здесь одну комнату. Сейчас “Оренбурггеология”, которая занимала большинство помещений Караван-Сарая, освобождает их. Надо воспользоваться этим моментом. Если бы республика взяла на себя содержание Караван-Сарая, мы смогли бы восстановить здесь библиотеку, музей, башкирский педтехникум.

*Зөһрә Алтынбаева, Миңниса Баһуманова, Сәлимйән Бәҙретдинов, Закир Зиннәтуллин, Эльвира Халикова әҙерләне.*